**Яҙыусы тураһында мәҡәләләр**

1. Атнабаев, Ә. Һары сәскәләр // Башкорт шигриәте антологияһы. - Өфө: Башкортостан «Китап» нәшриәте,2001.-468 б.
2. Вахитова, А. Изге һөйәгенең мәңгелек төйәге [Текст]: һәзиә Дәүләтшинаның тыуыуына - 105 йыл / А.Вахитова // Башкортостан. - 2010. - 20 март (№ 55). - 3-се бит.
3. Ғиззәтуллина, Г. Бығауҙарҙа килеш азат калды / Г.Ғиззәтуллина // Ватандаш. – 2005. - № 3. – 3-14-б.
4. Изге һөйәгенең мәңгелек төйәге [Текст]: һәзиә Дәүләтшинаның юбилей йылын каршылап //Бөрө шишмәләре. - 2010. - 27 март (№ 3). - 2 -3 б.
5. Камал,Р. Башкорт прозаһы мадонналары: Беренсе - Һәҙиә Дәүләтшина /Р.Камал // Ватандаш. – 2001. - № 3. – 129 – 130 б.
6. Килмөхәмәтов, Т. Ижади портреттар. Ырғыҙ буйҙарыннан - ил киңлектәренә : Һ.Дәүләтшина // Т.Килмөхәмәтов. Халыксанлык көсө. - Өфө: Башкортостан «Китап» нәшриәте, 1998. – 304 - 316 б.
7. Кинйәбулатова, К. Онота алмам уны мәңгегә / К.Кинйәбулатова // Ватандаш. – 1999. - № 2. – 66-72 б.
8. Ҡаскынова, Г. Һәҙиәнең яраткан йыры [Текст] / Г.Ҡаскынова // Йәшлек. - 2015. - 6 март (№ 9). - 17-се бит.
9. Каскынова, Г. һәзиә Дәүләтшинаның шиғри мираҫы [Текст]/Г.Каскынова // Ағизел. - 2011. - № 1. - 145 - 148 б.
10. Ҡаскынова, Г. һәзиәнең ғәзиз йөзө [Текст] / Г.Каскынова; яңы китап // Бөрө шишмәләре. - 2010. – 30-сы сентябрь. - 1-се бит.
11. Ҡаскынова, Г. Һәҙиә Дәүләтшина тормошонда Бөрө ҡалаһының роле / Г.Ҡаскынова // Бөрө шишмәләре. – 2008. – 8 апрель (№ 4). - 3-б.
12. Мөфтәхетдинова, Р. "Йондозкайым якты, ак ине..." [Текст]: мәшһүр языусы һәзиә Дәүләтшинаның тыуыуына 105 йыл /Р.Мөфтәхетдинова // Башкортостан кызы. - 2010. - № 3. - 4-5 -се биттәр.
13. Сөләйманов,Ә. Фольклор һәм халык тарихы: Һ.Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романы буйынса /Ә.Сөләйманов // Ватандаш. – 1998. - № 9. – 95 – 102 б.
14. Шәкүр, Р. Һомайғош / Р.Шәкүр // Башҡортостан ҡыҙы. - 2005. - № 3. - 20-21 б.
15. Шәкүр, Р. Һәҙиә Дәүләтшина // Р.Шәкүр Арҙаклы башкорттар. Ғилми-биографик очерктар. Тулыландырылған 2-се басмаһы. - Өфө: Китап, 2005. - 289-295 б.
16. Әмири,Ғ. Башҡорт кыҙына // Башҡорт шиғриәте антологияһы.- Өфө: Башкортостан «Китап» нәшриәте, 2001. – 390-391 б.
17. Әхмәтйәнова, Р. һәзиә Дәүләтшинаға арналған шиғырзар [Текст] / Р.Әхмәтйәнова // Бөрө шишмәләре. -2010. - 28 октябрь. - С.3.



Башҡортостан Республикаһы
Бөрө районы муниципаль районының
Биләмә-ара китапхана системаһы
муниципаль бюджет мәҙәниәт учреждениеһы
Үҙәк биләмә-ара китапханаһы



# Һәҙиә Дәүләтшина

**(1905 – 1954)**

Бөрө

Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина 1905 йылдың 21 февралендә (яңы стиль менән 5 мартында) Һамар губернаһы Николай өйәҙе Имел олоҫоноң (хәҙерге Һамар өлкәһе Оло Чернигов районы) Хәсән ауылы крәҫтиәне Лотфулла Ильясов ғаиләһендә тыуған.

Һәҙиә Дәүләтшина башта ауылдағы ҡыҙҙар мәҙрәсәһендә уҡый, ә инде Хәсән ауылының Янғол исемле байы балаларын уҡытыу өсөн ҡаланан мөғәллимә алдыртҡас, уның янына йөрөп, дәрестәр ала. Октябрь революцияһынан һуң ауылда асылған яңы мәктәптә уҡыуын дауам итә. 1920 йылда, ун биш кенә йәшлек үҫмер көйөнсә, ошо уҡ Ырғыҙ буйындағы Диңгеҙбай ауылына уҡытыусы итеп ебәрелә. 1921 йылдың аҙағында урындағы Совет органдарының тәҡдиме менән Һәҙиә Дәүләтшина, Һамар ҡалаһына китеп, Башҡорт-татар педагогия техникумына уҡырға керә.

Тиҙҙән, 1922 йылда, партия эшмәкәре, буласаҡ яҙыусы Ғөбәй Дәүләтшинға кейәүгә сыға. 1924-1925 йылдарҙа Һәҙиә Дәүләтшина бер йыл самаһы педагогия рабфағында уҡый. Тәүге әҫәре «Пинерка Һылыуҡай» хикәйәһе «Башҡортостан йәштәре» гәзитендә баҫылып сыға (1926). Колхоз королошо барышында кеше характерының формалашыу мәсьәләһенә арналған «Айбикә» (1931), «Башаҡтар тулҡыны» (1932) повестары, 1935 йылда баҫылып сыҡҡан «Һырға һабағы» исемле һөкланғыс хикәйәһе менән әҙибә ҙур проза оҫтаһы булараҡ ныҡлы танылыу таба.

1934 йылда Һәҙиә Дәүләтшинаға Башҡортостан яҙыусылары делегацияһы составында СССР яҙыусыларының I Бөтә Союз съезында ҡатнашыу насип була.

1935 йылда Һәҙиә К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына кереп, уның ике курсын бик яҡшы билдәләр менән тамамлай. Студентка Һ. Дәүләтшина 1936 йылда Советтарҙың ғәҙәттән тыш X Бөтөн Башҡортостан съезына делегат итеп һайлана.

1935-1937 йылдарҙа «Ялҡынлы йылдар» повесының, ә 1942-1952 - «Ырғыҙ буйҙарында» романының бер нисә вариантын яҙа. 1967 йылда яҙыусы «Ырғыҙ» романы өсөн (үлгәндән һуң) Башҡорт АССРының Салауат Юлаев исемендәге премияһына лайыҡ була.

Һәҙиә Дәүләтшина тураһындағы иҫтәлектәрҙең береһендә мәшһүр яҙыусының ошондай һүҙҙәре килтерелә: «Мине яҡшыраҡ белгегеҙ килһә, «Ырғыҙ» романымды уҡығыҙ. Минең бөтөн йәнем, саф йөрәгем шул романда». Эйе, башҡорт халҡының изге һәм саф күңелле, героик характерлы ҡыҙы,ысын-ысынында халыҡ яҙыусыһы Һәҙиә Дәүләтшинаның йәне лә, йөрәк тибеше лә – уның һөкланғыс әҫәрҙәрендә, халыҡ тормошоноң һәм яҙмышының икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрен айҡаған илһамлы «Ырғыҙ» романында.

Һәҙиә Дәүләтшина 1954 йылдың 5 декабрендә Бөрө ҡалаһында вафат була.

**Башҡорт ҡыҙына**

*Һәҙиә Дәүләтшинаға*

Урал тауҙарының буйында,
Оҙон-оҙон быуат буйына,
Буйһонмайса яуыз яҙмышҡа,
Уның менән ҡыйыу алышҡан
Башҡорт ҡыҙҙарын мин йырларға
Ҡәләм алдын иһәм ҡулдарға,
Һәҙиә, һин алға баҫаһың,
Һине данлап килә яҙаһым
Башҡорт ҡыҙы әсе сеңләгән,
Тик һис кемгә башын эймәгән,
Йөҙгә пәрәнжә лә киймәгән.
Ир-егеттәй һыбай менгән ул,
Иркен яулап, яуға елгән ул,
Үлем күҙенә бағып, көлгән ул! –
Һәҙиәкәй, һинең һының был,
Замандашым, килсе, йырым бул!
Башҡорт ҡыҙы ярһыу йөрәкле,
Һүнеү белмәҫ ҡайнар теләкле;
Йырға бик бай уның күңеле,
Ҡоштар осоуындай бейеүе!
Мөхәббәте уның - ут кеүек,
Ә нәфрәте - һалҡын, боҙ кеүек.
Үҙе дәртле, үҙе бик түҙем,
Һәҙиәкәй, был бит һин үҙең!
Ғәрәп һүҙе булған Һәҙиә,
Бүләк тигән һүҙ ул беҙҙеңсә.
Башҡорт, теләп һиңә ҙур теләк,
Биреп һиңә ҡайнар, ҡуш йөрәк,
Бүләк итте һине халыҡтарға,
Даның шаулар бөтә яҡтарҙа.
Йөҙөк ҡашы булдың халҡыңдың,
Һәҙиәкәй, йырың ялҡынлы.
Йәмле, шаулы Ырғыҙ буйҙарын,
Ырғыҙ буйҙарының ҡыҙҙарын,
Уның арыҫландай улдарын,
Шағирә, һин данлап йырланың.
Ғашиҡ инең беҙҙең заманға,
Йырың тынмай һаман, һаман да.
Һәҙиәкәй, һүҙең тутыҡмаҫ,
Илең һине һиҫ тә онотмаҫ.

Ғәйнан Әмири